# *Дәрес планы*

1. ***Ойоштороу мәле.***

2. ***Артикуляцион күнегеү.***

- *мәҡәлдәр менән эш.*
- *уҡытыусы уҡыуы*
- *уҡыусылар уҡыуы*
- *мәҡәлдәрҙе төркөмдә эшләү, 1төркөм русса мәҡәл, 2-се төркөм башҡортсаһын әйтә.*
- *башын-аҙағы*

3. ***Яңы тема өҫтөндә эш.***

- *С.Юлаев тураһында биографик белешмә биреү*
- *видеофильм ҡарау; проекторҙан альбом ҡарау*
- *шиғыр һөйләү "Уралым" шиғыры*

4. ***Йомғаҡлау***

5. ***Баһалау***

6. ***Китаптар күргәҙмәһе менән танышыу.***

**Башҡорт теле дәресе**
**5 синыф**

***Тема:*** *Салауат Юлаев һәйкәле.*
*Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.*

***Дәрестең бурыстары:***

1. *уҡыусыларҙы С.Юлаевтың тормошо, ижады менән таныштырыу;*
2. *Милли батырыбыҙҙың рухы менән илһамландырыу; уның менән ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, уға ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү;*
3. *һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен ҡабатлау: телмәр үҫтереү.*

***Йыһаҙландырыу:***

1. *С.Юлаев тураһында китаптар күргәҙмәһе;*
2. *С.Юлаевтың портреты;*
3. *С.Юлаевтың ижадына, тормош юлына арналған папка;*

***Дәрестең техник биҙәлеше:***

1. *мультимидиа проекторы;*
2. *видеомагнитофон, телевизор.*

***Дәрес барышы:***

1. ***Ойоштороу мәле:***
   - *Һаумыһығыҙ, уҡыусылар ! Хәйерле көн!*
     *Уҡыусылар, бөгөн беҙгә ҡунаҡтар килгән, улар менән дә иҫәнләшеп алайыҡ ( балалар иҫәнләшәләр)*

2. ***Артикуляцион күнегеү.***

***Уҡытыусы:*** *Дәресебеҙҙе матур шиғырҙан башлайыҡ.*

*Бик күңелле ял иттек*
*Дәрес башлана хәҙер*
*Беҙ инде матур итеп*
*Яуап бирергә әҙер.*

***Уҡытыусы:*** *Хәҙер таҡталағы мәҡәлдәрҙе ҡарайыҡ.*

*Батыр яуҙа һынала – Батыр в бою испытывается.*
*Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ мең үлер.*
*Батырға үлем юҡ – Батыру смерти нет.*

***Уҡытыусы:*** *Без бөгөн төркөмләп эшләйәсәкбеҙ. Беҙҙең синыф 2 төркөмгә бүленгән.*

- *мин уҡыйым;*
- *уҡыусылар уҡыуы;*
- *1-се төркөм 2-се төркөмгә русса мәҡәл әйтә,*
  *2-се төркөм башҡортса вариантын әйтә;*
- *1 уҡыусы башын уҡый, 2 се уҡыусы аҙағын уҡый.*

***Уҡытыусы:*** *- Был мәҡәлдәр нимә тураһында?*
***Уҡыусы:*** *- Был мәҡәлдәр батырҙар, батырлыҡ тураһында.*

***Уҡытыусы:*** *- Эйе, дөрөҫ. Мәҡәлдәр батырҙар, батырлыҡ тураһында. Халыҡ үҙ батырҙары тураһындағы иҫтәлекте быуаттар буйы беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап килә, улар тураһында йырҙар йырлай, легендалар тыуҙыра, батырҙарҙың көсөн, етеҙлеген, зирәклеген тыуҙыра, батырҙарҙың көсөн, етеҙлеген, зирәклеген данлай. Халыҡ онотмай үҙенең батырҙарын.*
*- Бөгөнгө беҙҙең дәресебеҙ ҙә башҡорт халҡының батыры, милли геройы, йырсы-импровизатор С.Юлаевҡа бағышлана. Без С.Юлаевтың тормошо, яу юлы, уның шиғыры менән танышып, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен ҡабатлап китербеҙ.*

3. ***Яңы тема өҫтөндә эш.***

***Уҡытыусы:*** ***- Кем ул С.Юлаев? Уның тураһында нимәләр беләһегеҙ?***
*( С.Юлаев тураһында биографик белешмә биреү).*
*- Башҡорт халҡының милли батыры һәм шағиры С.Юлаев 1754 йылда хаҙерге Салауат районы Тәкәй ауылында тыуған. Салауат үҙен үҫмер сағынан уҡ батыр, ҡыйыу тип таныта. 1771-1772 йылдарҙа Шайтан – Көҙөй старшинаһы вазифаһын башҡара. Ул 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе, Е.Пугачевтың көрәштәше. 2004 йылда С.Юлаевтың тыуыуына 250 йыллығын билдәләнек. 1775 йылды, Салауатты, атаһын, көрәштәштәрен тотоп Эстонияға мәңгелек һөргөнгә ебәрәләр.*
-Поэт и национальный герой башкирского народа С.Юлаев родился 1754 году в д. Текеево, ныне Салаватского района, в семье старшины Ю.Азналина. Салават был с детства сильным, ловким,

уже в 3 года отец учит его ездить верхом и владеть оружием. С ранних лет начинает ходить вместе с отцом на охоту, уже в 14 лет самостоятельно на охоте убивает медведя. В 19 лет становится полковником. С детства Салават слышал рассказы отца и матери о бедствиях народа, о башкирских восстаниях и о их жестоком подавлении. Он видел, как мурзы и тарханы эксплуатировали простой народ. Все это оставляло в его душе неизгладимый след. В 1773-1775 гг. становится одним из руководителей Крестьянской войны под предводительством Е.Пугачева. Но в октябре 1775 году около д. Миндяшево отряд полковника Аршеневского поймал Салавата и его сподвижников. В ноябре 1775г его отправляют на вечную каторгу в Эстонию на крепость Рогервик. В 2004г было 250- летие со дня рождения С.Юлаева. В честь национального героя был установлен в 1967 году памятник.

**а) Видеофильм ҡарау.**

***Уҡытыусы:*** *- Хәҙер С.Юлаев тураһында видеофильм ҡарайыҡ. Һорауҙар бирәм.*

1.Салауат нисәнсе йылда тыуған? (7154)

2.Ул ҡайҙа тыуған? ( Салауат районы, Тәкәй ауылында)

3.Салауатты, атаһын ҡайҙа һөргөнгә ебәрәләр? (Эстонияға, Рогервик крепосына)

4.С.Юлаев һәйкәленең авторы кем?

5.Һәйкәл нисәнсе йылда асыла?

6.Быйыл 2007 йыл, ноябрь айында һәйкәл асылыуының нисә йыллығын билдәләп үттек? (40 йыл)

**б) Һөйләмдәр төҙөү. Карточкалар менән эш.**

***Уҡытыусы:*** *- Был карточкаларҙа һүҙҙәр бирелгән, һеҙгә дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөп яҙырға кәрәк булыр. Башта иҫкә төшөрөп китәйек, башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө ниндәй?*

*Порядок слов в предложении в башкирском языке* *<u>подлежащее</u> с определением распалагаются в начале предложения, затем идут дополнение и обстоятельство. А сказуемое занимает последнее место. (схеманы күрһәтеү)*

--------- _._._._._. ========

*а) дәфтәрҙә асып число, синыфта эш яҙыу (һөйләмдәрҙе) яҙыу.*

***Уҡытыусы:*** *-Һәр төркөмгә икешәр һөйләм эшләп бөткәс дәфтәрҙәрегеҙҙе алмашығыҙ , тикшерегеҙ , баһа ҡуйығыҙ, ҡысҡырып уҡып сығығыҙ (динамик пар).*

*Һөйләмдәр.*
*а)Өфөгә, барзыҡ, ҡышҡы каникулда, беҙ.*
*б)С.Юлаев һәйкәле, булдыҡ ,беҙ, янында.*
*в)Ағиҙел ярында, һәйкәл, был, урынлашҡан.*
*г)Миңә, һәйкәл, оҡшаны, был.*
***в) Текст өстөндә эш. Проекторҙан фотоальбом ҡарау.***
***(С.Юлаев һәйкәлендә туҡтатыу).***
***Уҡытыусы:*** *-Хәҙер ошо һәйкәл тураһында китаптан уҡып китәйек. Быйыл 2007 йылдың 17 ноябрендә һәйкәл асылыуға 40 йыл тулып үтте. Һәйкәл 1967 йылда асыла.*
*-Китаптарҙы астыҡ 96-сы бит.*
*Һүҙлек эше. (һүҙҙе уҡыу; һүҙл-ә яҙыу) хор менән уҡыу -*
*һәйкәл – памятник;*
*бейек ярында – на высоком берегу;*
*урынлашҡан – установлен;*
*бронзалаштырылған суйын – бронзовый чугун;*
*ҡойолған – отлит;*
*ҡойоу – (лить памятник);*
*а)уҡытыусы уҡыуы;*
*б)сылбырлап уҡыу;*
*в)текстан һүҙлектәге булған һөйләмдәрҙе табып уҡыу.*
***Уҡытыусы:*** *- Памятник создан архитектором народным художником БАССР И.Г.Гайнутдиновым и советским скульптором народным художником Северо- Осетинской АССР Сосланбеком Дафаивичем Тавасиевым. Над этим памятником он работал почти 20 лет. За памятник С.Юлаева Тавасиеву была присуждена Государственная премия СССР. В ноябре 2007 года было 40 лет как был открыт этот памятник.*
***г) Шиғыр һөйләү«Уралым» шиғыры.***
***Уҡытыусы:*** *- Салауат батыр булып ҡына түгел,ә шағир булараҡ та халыҡ күңелендә йәшәй. Шиғырҙарында ул Тыуған илен данлай, Урал тәбиғәтенең гүзәллеге менән ғорурлана,ҡоштар тауышына һоҡлана. ( Экрандан шиғырын тыңлау).*
*-Беҙҙең уҡыусылар,һеҙгә хөрмәтле ҡунаҡтар,шиғыр – күстәнәс тә әҙерләгәйнеләр. Хәҙер һеҙгә һөйләп ишеттерерҙәр.*
*«Уралым шиғырын һөйләү.*
***Уҡытыусы:*** *- Бөтә илебеҙ халыҡтарының ғорурлығы булған С.Юлаевтың мәңгелек иҫтәлеге ҡала, урам , баҡса,колхоз исемдәре булып тормошобоҙға инде.*

*1967 йылда С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы булдырылды;*
*Мәшһүр композиторыбыҙ З.Исмәғилов «Салауат» операһын яҙҙы;*
*Салауат ҡалаһы, районы, шул уҡ районда колхоз;*
*Малаяҙ ауылында С.Юлаев музейы;*
*Эстонияла Палдиски ҡалаһында Салауат бюсы;*
*Өфөлә С.Юлаев һәйкәле; С.Юлаев проспекты;*
*С.Юлаев исемендәге хоккей командаһы булдырылды.*
*-Шуныһы әһәмиәтле, урыҫ һәм бүтән туғандаш халыҡтар С.Юлаевты үҙ батырҙарындай күреп. йырҙар, легендалар, әкиәттәр сығарған. Рус яҙыусыларының ижадына уның исеме героик шәхес булып ингән образ.*

***5. Баһалау.***

***6. Китаптар күргәҙмәһе менән таныштырыу.***

*1) С.Злобин «С.Юлаев» романы.*
*2)В.Сидоров «Был героем Салават». «По следам Салавата».*
*3) И.Гвоздикова «С.Юлаев. Исследование документальных источников.»*